# «Аулаҡ өй»

# (Кластан тыш сара)

*Шишмә тауышы, ҡоштар һайрай, тәбиғәт күренештәре. Талғын ғына көй уйнай. Ике ҡыҙ һыуға килә, бейейҙәр. (Баймөхәмәтова Дилә, Атанова Алтынай, «Һыу юлы» бейеүе)*
**Алтынай:** Әхирәт, ҡалай осрашып һәйбәт булдыҡ әле. Бөгөн әсәйемдәр күрше ауылға ҡунаҡҡа киттеләр. Әллә беҙҙә бөгөн аулаҡ өй ойошторайыҡмы?
**Дилә**: Уй, һәйбәт булыр ине әхирәт.Әйҙә, әйҙә!Мин ҡалған ҡыҙҙарға еткерермен. (Шишмәнән һыу алалар ҙа, ҡайтырға сығалар)
**Алтынай**: Кискә барығыҙҙы ла көтәм, килегеҙ!
**Дилә:** Килербеҙ!

*Башҡорт өйөнөң эсе.Алғы планда урындыҡ.Биҙәлгән өй эсе.*
*Өйҙә Алтынай әле бер, әле икенсе эш менән була. Ҡулына ҡоймаҡ тотҡан Таңһылыу килеп инә.*
**Таңһылыу:** Йоҡа ғына итеп ҡойҙом
Бына үҙем ҡоймаҡтарҙы.
Телде йоторлоҡ булды,
Ҡыуандырырмын ҡунаҡтарҙы.

**Алтынай:** Әйҙә, әйҙә түрҙән уҙығыҙ.
*Әлфинә менән Дилә инәләр.*

**Әлфинә:** Өләсәй әйтә, ҡымыҙҙы
Баһадирҙар эсә, ти.
Бәләкәй малайҙар унан
Көслө булып үҫә, ти.

**Алтынай**:әйҙәгеҙ ҡыҙҙар, рәхим итегеҙ!

*(Я.Зөлфиә менән Гөлназ инә, Зөлфиәнең ҡулында йүкә балы, Гөлназдың ҡулында солоҡ балы.)*
**Я.Зөлфиә**:Бына һеҙгә йүкә балы,
Бер ҡабып ҡара әле!
Беҙҙең яҡтың йүкәләре

Йәмле генә түгел икән,
Тәмле лә икән әле.

**Гөлназ:** Ә быныһы солоҡ балы, ауыҙ итерһегеҙ.

**Алтынай:** Уйй, рәхмәт инде ҡыҙҙар.

*(Ишек шаҡыйҙар.Диана менән Эльвина инә.Береһенең ҡулында эремсек, береһенең ҡулында ҡорот.)*

**Диана:**Ҡайҙа беҙҙең хужабикә, бына кәстәнәстәрҙе ҡабул ит.
**Эльвина**:Бына мин әсе ҡорот килтергәйнем, һалҡын тейгәндә эй килешә.
**Диана**:Ә мин һары эремсек килтерҙем, ауыҙ итерһегеҙ
**Алтынай**:Рәхмәт, ҡыҙҙар.
**Зөлфиә:**Ҡара әле әхирәт, һин үҙең дә әллә нимәләр әҙерләп ташлағанһың бит.Сәк-сәгең дә, бауырһағың да әҙер.Хатта талҡан тартып, ҡурмас ҡурырға ла өлгөргәнһең.

*(Тышта йыр тауышы ишетелә. Ҡыҙҙар йырлап килеп инә.Өйгә үтеп, урындыҡҡа ултыралар, бергәләп йырлайҙар.(«Мандолина»йыры, 5а кл ҡыҙҙары башҡарыуында. Йыр бөтә. Зөлфиә ырғып тора ла: Эх* кенәәәә!(Ритайым көйө, бергәләп түңәрәктә бейейҙәр.
*Тышта ишек дөбөрләткән тауыш, ҡыҙҙар йәшенәләр.Егеттәр инә.)*

**Егеттәр йырлай**:Беҙ үҙебеҙ дәү Аҡтаныҡ
Йөрөмәйбеҙ маҡтанып.
Беҙ урамдан үткән саҡта,
Ҡыҙҙар ҡала һоҡланып.
Ай илдәре, илдәре
Илдәрендә күлдәре.
Шул илдәрҙә ҡыҙҙар һайрай,
Һандуғастай үҙҙәре.
**Рәмзил**:Әле генә тауыштары сыға ине, үҙҙәре күренмәйҙәрсе.
**Руслан**:Эйййй, ҡыҙҙар, һеҙ ҡайҙа?
*(Рәмзил бер ҡыҙҙың(Зөлфиәнең) яулығын барып тартып ала.Зөлфиә йәшеренгән еренән сыға.Тауышҡа башка ҡыҙҙар ҙа сыға.)*

**Рәмзил** (яулыҡты өҫкә күтәреп):Әйҙәгеҙ, «Йәшерәм яулыҡ» уйынын

уйнайыҡ.
**Ҡыҙҙар**:Әйҙәгеҙ!
**Егеттәр**: Беҙ риза!
**Руслан:**Ә уйынды кем алып бара,яулыҡты кем йөрөтә?
**Зөлфиә:** Әйҙәгеҙ, мин булам.
**Бөтәһе**: Беҙ риза!
*(Ярым ай рәүешендә ултыралар, Зөлфиә йырлап әйләнә.)*
**Зөлфиә**:Йәшерәм яулыҡ, йәшерәм яулыҡ
Яңғыҙ ҡайын артына.
Һиҙҙермәйенсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.
**1-се яулыкты** Кәримов Сыңғыҙға һала.*(Сыңғыҙ әкиәт һөйләй.)*
**2-се яулыкты** Ғәйнуллин Русланға һала. *( Ғәйнуллин Р. «Ялсыгол»йырын йырлай.)*
**3-сө яулыкты** Гөлназға һала. *(Гөлназ башка кыҙҙар менән «Бөрйән кыҙҙары» бейеүен бейейҙәр.)*
**4-се яулыкты** Рәмзилгә һала, *( Рәмзил көләмәс һөйләй.)*
**5-се яулыкты** Таңһылыуға һала. *(Таңһылыу менән Зөлфиә бейейҙәр. Әтәстәр ҡыскырған тауыш.)*
**Диана:**Уйй, әтәстәр ҡысҡыра башланы, ҡайтышайыҡ инде.
**Алтынай**:Әйҙәгеҙ егеттәр, ҡайтышыр алдынан дәртле генә ҡурай тартып алығыҙ әле.
*(Егеттәр ҡурай тарталар, ошо арала артҡы планда парланышып сығалар.Егеттәр ҡурай тарта-тарта таралышалар.)*